**Демонстрационная контрольная работа по родному (башкирскому) языку для 5 класса**

**Аңлатма һүҙ.**

Башҡорт (дәүләт) теле буйынса уҡыусыларҙың белем кимәлен баһалауҙың төп критерийҙары.

Контроль диктанттарҙы баһалау.

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй. Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим ителә. Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш. Диктанҡа билдә ҡуйғанда хаталарҙың характерына иғтибар ителә.Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупа: булмағандары,йәғни грамоталыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Түбәндәге хаталар тупаҫ булмағанға инә: ҡағиҙәнең иҫкәртмәһенә ҡараған хаталар, бәйләү юлы менән яһаған яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышында хаталар,бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу,үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышында хаталар. Диктант бер генә билдәменән баһалана.“5” – тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктацион хата булған эшкә, “4”-4 орфографик, 3 пунктацион,йә 1 орфографик, 6 пунктацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа,5 орфографик хатаһы булған эшкәлә“4”ҡуйырға мөмкин.“3”–6орфографик,6 пунктацион,йә 3

орфографик, 9 пунктацион, йә 12 пунктацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктацион хаталы эшкәлә“3”ҡуйыла. “2”- 9 орфографик,9 пунктацино йә 8 орфографик, 10 пунктацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла.. Хатаһаны15 орфографик хатанан да артып китһә “1” билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Изложение һәм иншалар яҙғанда:

| билдә | Баһалауҙың төп критерийҙары | |
|---|---|---|
| | Йөкмәткеһе һәм телмәр | грамоталылыҡ |
| “5” | Эштең йөкмәткеһе темаға тулыһынса тап килә. Фактик хаталар юҡ.<br>Йөкмәткеһе эҙмә-эҙлекле асыла. Эштең һүҙлеге бай<br>Стиль һәм мәғәнәүи яҡтан текст камил.Эштә йөкмәткеһе яғынан–5 һәм телмәр яғынан 5 кәмселек булыуы мөмкин | 3орфографик,3пунктационйә4грамматик хата булыуы мөмкин |

| | | |
|---|---|---|
| “4” | Эштең йөкмәткеһе,нигеҙҙә,темаға тура килә ( бер ни тиклем ситкә тайпылыштар бар).<br>Йөкмәткеһедөрөҫ,ләкин һөйләм төҙөлөшөндә ҡайһы бер фактик хаталар бар. | 7орфографик,6 пунктацион йәки 2 орфографик,13 пунктацион хата булыуы мөмкин.Шулай уҡ 5 грамматик хата булыуы мөмкин |

| | | |
|---|---|---|
| | Фекер ебендә бер ни тиклем эҙмә-эҙлелек боҙолған.<br>Ҡайһы беросраҡта һүҙҙәрҙеңҡулланылышында хата китеүе мөмкин.<br>Эштең стиле ярайһы уҡ төҙөк һәм мәғәнәле.Дөйөм алғанда,эштең йөкмәткеһендә 8 һәм телмәрендә 8 кәмселек булыуы мөмкин. | мөмкин. |
| “3” | Эш темаһынан байтаҡ ҡына ситкәтайпылған.<br>Эштең йөкмәткеһе,нигеҙҙә,дөрөҫ,ләкин һөйләм төҙөлөшөндә фактик хаталар байтаҡ.<br>Эҙмә-эҙлелек тулыһынса ҙаҡланмай,һүҙҙәрҙең ҡулланылышында хаталар бар.<br>Эштә йөкмәткеһе яғынан–15, телмәре яғынан-15хатабулыуы мөмкин. | 10орфографик,13пунктацион шулайуҡ8 грамматик хата булыуы мөмкин |
| “2” | Эш теманы асмай<br>Һүҙҙәр ҡулланылышында бик күп фактик хаталар ебәрелгән.<br>Эштеңбөтә өлөшөндә лә фекерҙең эҙмә-эҙлелеге боҙолған,һөйләмдәр урынлы ҡулланылмаған, бәйләнеш юҡ.<br>Эштең йөкмәткеһендә –20,телмәрендә 20-нән күберәк хата ебәрелгән | 12-15орфографик,10 пунктацион,12 грамматик хата |
| | Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик,орфографик,лексик эштәр тәкдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.<br>Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәкдим ителә: 5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,<br>«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәгедөрөҫ эшләнгәндә,<br>«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә,<br>«2» билдәһе бер эштәдөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла. | |

Контроль диктант:

| | |
|---|---|
| “5” | 1 орфографик,<br>2 пунктуацион |
| “4” | 1-2 орфографик,<br>2 -3 пунктуацион хата |
| “3” | 3-4 орфографик,<br>4-5 пунктуацион хата |
| “ 2” | 5 орфографик<br>4-6 пунктуацион хата |

| Эш төрҙәре | Кластар | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 5 класс | 6 класс | 7 класс | 8 класс |
| Һорауҙарға яуап, тест | 0 | 0 | 0 | 0 |
| Контроль иктант | 1 | 1 | 1 | 1 |
| Изложение | 0 | 0 | 0 | 0 |
| Инша | 0 | 0 | 0 | 0 |
| Контроль күсереп яҙыу | 0 | 0 | 0 | 0 |
| | 1 | 1 | 1 | 1 |

**Изложение**

| | |
|---|---|
| “5” | 2орфографик,3пунктуацион,2 грамматик хата |
| “4” | Йөкмәткеһе дөрөҫ 1-2 фактик,4орфографик,2-4пунктуацион,3 грамматикхата |
| “3” | Эҙмә-эҙлелектулыһынсаһаҡланмай, һүҙҙәрҙә хаталар бар,5-6 орфографик,5пунктуацион,4 грамматикхата |

**Контроль күсереп яҙыу текстарын баһалау**

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе уҡыусылар өсөн дәрестәрҙә текстарҙы күсереп яҙыу киң ҡулланыла. Уҡыусылар дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрәләр, бигерәк тә башҡорт телендәге үҙенсәлекле хәрефтәрҙе, үтелгән орфограмманы ғәмәлдә ҡулланырға, һүҙҙәрҙе юлдан-юлға дөрөҫ күсерергә, һүҙҙәрҙе уҡып яҙма телмәрҙә хатаһыҙ яҙырға өйрәнәләр. Күп тапҡырҙар яҙыу һөҙөмтәһендә, балаларҙа дөрөҫ яҙыу күнекмәләре барлыҡҡа килә. Шулай уҡ күсереп яҙыу эше уҡыусыларҙың иғтибарын, хәтерен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Күсереп яҙыу текстары дәрестә үтелгән грамматик һәм лексик темалар менән бәйле алына. Күсереп яҙғанда текст һәр уҡыусының алдында булырға тейеш. Индивидуаль карточкалар, дәреслектән күнегеүҙәр алынырға мөмкин. Әгәр ҙә өҫтәлмә эш алынмаһа, күсереп яҙыу тексы бер генә билдә менән баһалана. **«5»** билдәһе төҙәтеүҙәр, бысратыуҙар булмаған, йә 1 пунктуацион хата булған эшкә, **«4»** билдәһе 2 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 4 пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 6 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 3 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«3»** билдәһе 3 орфографик, 4 пунктуацион йә 7 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 2 орфографик, 4 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«2»** билдәһе 6 орфографик, 8 пунктуацион йә 10 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Хаталар һаны 8 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр тексты күсереп яҙыуҙан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәкдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана. Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәкдим ителә: **«5»** билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда, **«4»** билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә, **«3»** билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә, **«2»** билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**Ҡулланылған әҙәбиәт исемлеге**


1. З.МҒәбитова,М.ДЯманһарина.Методикҡулланма.Башҡорттеле6-9.-Өфө;Китап 2017.
2. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы: Уҡытыу урыҫ телендәалыпбарылған мәктәптәрҙең5-11синыфуҡытыусылары өсөнҡулланма.–Өфө: Китап,2009.

2. Башҡорт теленән программа. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 1-11 кластары өсөн. / Төҙөүселәре:ТоломбаевХ.А.,Дәүләтшина(1-4кластар өсөн),ҒәбитоваЗ.М.,УсмановаМ.Ғ.(5-11 кластарөсөн). -Ижевск:
КнигоГрад,2008.
3. Бикбаева Т.Я., Ҡунафина Т.Ы. Башҡорт теленән диктанттар йыйынтығы. Милли мәктәптәрҙең 5-11 синыфтарындаэшләгән уҡытыусыларөсөн ҡулланма.– Өфө: Эдвис,2008.
4. Бикбаева Т.Я., Ҡунафина Т.Ы. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы. Милли мәктәптәрҙең 5-11 синыфтарындаэшләгән уҡытыусыларөсөн ҡулланма.–Өфө:Эдвис,2008.
5. Ғәбитова З.М., Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н., Йәғәфәров Р.Ғ, Рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу:Методиккүрһәтмә.– Өфө: БМҮИ,2008

**Контроль диктант**

**5 класс**

**КӨҘ КИЛДЕ**

**Йәмле йәй үтеп китте. Тәбиғәттә көҙ билдәләре күберәк күренә башланы.Болондар ҙа, яландар ҙа үҙҙәренең йәм-йәшел төҫтәрен юғалттылар.Бөтөнләй буш ҡалған иген баҫыуҙары ла көҙ башланыуы тураһында хәбәр итә.**

Ағастарҙа һары япраҡтар күбәйҙе. Ҡоштар һайрауҙан туҡтаны. Ҡара ҡарлуғастар һәм торналар йылы яҡтарғаосоп киттеләр.Йәнлектәр донъяһында ла ҙур үҙгәрештәр бар. Уларҙың бөтәһенең дә балалары үҫеп етте һәм үҙалдынакөнкүрәбашланы.

Беҙҙесолғапалғантәбиғәткөндән-көнүҙгәрәбара.Хайуандарһәмүҫемлектәрһалҡынҡышҡаәҙерләнәләр.

Көндәрҡыҫҡара.Һәр аҙымдаямғырлыһәмҡыраулыкөндәряҡынайыуыһиҙелә.

**Функциональ грамоталыҡ буйынса эштәрҙәре:**

1. Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә
2. Тиң киҫәктәрҙең аҫтына һыҙырға